Урал Ҡолошов

# Һүнмәһенсе һөйөү усағы...



Урал Ҡолошов

# Һүнмәһенсе
# һөйөү
# усағы...

Творческая мастерская «Солнечный круг»
Челябинск
2015

## АВТОР ХАҠЫНДА БЕЛЕШМӘ

Ҡолошов Урал Фәләх улы 1965 йылдың 1 майында Силәбе өлкәһенең Сосновка районы Тәгеш ауылында тыуа.

1982 йылда урта мәктәпте тамамлай, унан һуң Силәбе ҡалаһының 73-се һанлы ПТУ-һында рәссам-декоратор һөнәренә эйә була. 1984-1986 йылдарҙа Совет Армияһында хеҙмәт иткәс, Силәбе сәнғәт һәм мәҙәниәт академияһының художество бүлегендә уҡый. Әлеге ваҡытта Сосновка районының Долгодеревенск ҡасабаһындағы балалар сәнғәт мәктәбендә уҡытыусы булып эшләй, «У камина...» тип аталған район әҙәби берекмә менән етәкселек итә. Силәбе өлкәһенең Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге әҙәби берекмә ағзаһы.

Урал Ҡолошовтың тәүге шиғырҙары студент сағында «Кадры культуры» гәзитендә баҫыла. Шиғырҙары һәм хикәйәләре «Камин янында...», «Знакомство», «От Урала до Невы», «Силәбе шишмәләре», «Һөйөнсө», «Силәбе башҡорттарының әҙәбиәт антологияһы», «Дуслык тирмэсендә», «Берез уральских шум» исемле әҙәби йыйынтыҡтарға ингән. 2006 йылда Башҡортостан китап нәшриәтендә авторҙың «Рәхмәт көсө» исемле тәүге хикәйәләр китабы донъя күрә. Икенсе китабы «Брызги солнечных лучей» 2010 йылда Силәбелә нәшер ителә.

Өсөнсө китабы — «Күңел йылыһы», авторҙың 50 йәшлек юбилейы айҡанлы әҙерләнеп 2015 йылда донъя күрә. «Һүнмәһенсе һөйөү усағы...» әҙиптең дүртенсе китабы.

Урал Ҡолошов 2011 йылда Силәбе өлкәһенең Сосновка район хакимиәте булдырған Ғәлимов Сәләм исемендәге әҙәби премияға лайыҡ була. 2015 йылдан Башҡортостан Яҙыусылар союзы ағзаһы.



Мейәс буйы

## МИНЕҢ ТЫУҒАН ЯҠТАРЫМДА

Минең тыуған яҡтарымда
Шундай дәртле ағайҙар,
Ҡурай кеүек йырлы-моңло
Ғәжәп матур апайҙар.

Минең тыуған яҡтарымда
Иманлылар ололар.
Күңел шишмәһен урғылтып,
Рухи көс тараталар.

Минең тыуған яҡтарымда —
Их, ҡыҙҙар, һай егеттәр!
Эшләгәндә арыҫландай,
Туйҙа осҡон кеүектәр.

Уларҙы гармун бейетмәй,
Йөрәк уты йәшәтә.
Илһамлы тормош ялҡыны
Ғаләм сигенә илтә.





## ӘСӘЙЕМ

Таңдар менән, иртә таңдар менән,
Әсәкәйем һиңә ҡайтырмын.
Ә һин мине күптән көткән кеүек
Сабыр ғына ишек асырһың.

Беләм инде, һары таңдан тороп,
Тәүге нурҙар менән аяҡта,
Көткәнһең һин бына ҡайтыр тиеп,
Иҫке усғыңды яғып та.

Наҙлы ҡараштарың иркәләйҙәр
Ҡолағымда — шишмә тауышың.
— Һаумы, әсәй, ҡайттым әле һиңә
Баҫайым тип йөрәк һағышын.

Өҙгөләнмә, әсәй, ултыр әйҙә,
Эш-көштәрең әле ҡасмаҫтар.
Киткән ҡоштар кире ҡайтһалар ҙа,
Үткән йылдар ғына ҡайтмаҫтар.

Һөйлә әле, әсәй, тартынмайса,
Һөйлә, әйҙә, йөрәк серҙәрең.
Туҡтатайыҡ тик бер аҙға ғына
Ағымдарын тынмаҫ йылдарҙың.

## АЛЛАҺ ЮЛЫНДА ЙӨРӨҺӘМ ДӘ...

Аллаһтың юлында йөрөһәм дә,
Тик уҡынып ятмайым.
«Кешелек» — тигән аятты
Ғүмер буйы ятлайым.

Ҡөрьән һүҙе — дөрөҫ һүҙ ул,
Мин Аллаһҡа ышанам.
Яҙмышыма рәхмәтлемен,
Иманыма таянам.

Выждан, аҡыл, намыҫ тигән,
Һүҙҙәр миңә ят түгел.
Әсәм һөтө менән ингәс,
Мәңге оноторлоҡ түгел.



Тыуған йорт





# НИҢӘ ЯҘАМ?

Шиғырҙар яҙам ни өсөн,
Әллә дан-шөһрәт өсөн?
Был булыр төплө хата,
Илһам урғылып ята.

Хис-тойғомдо бүлешәмен
Һеҙҙең менән дуҫтарым!
Һеҙгә ҡарай талпынып,
Һайрап тора ҡоштарым.

Яҙ ҡояшын тойоп сәскә
Үрелгән кеүек көнгә,
Мин дә әйҙәйем ғаләмгә,
Аҡмулла, Сәләмдәргә...

Шул саҡта өр-яңы йырҙар,
Тыуа минең күңелдә.
Халҡым менән бергә булһам,
Ашам бәхет күгенә.

## ӘСӘЙЕМӘ

Мең-мең шиғыр яҙыр булам мин,
Барыһын да һиңә бағышлап.
Әйтһәң дә һин, бүлмә инде тип,
Бөгөн һағышымды һиңә бүләм.

Ҡайтам ҡабат һинең яндарыңа,
Тыуған яҡҡа, тыуған ауылыма.
Әйтсе, кем бурысһыҙ ғына
Был донъяла йәшәй алған?

Буш ҡыуыҡтай һүҙҙәр кәрәк түгел,
Ғүмер бизмәненә бер эш һалһаң.
Мин бөгөн дә шул һүҙҙәрҙә тороп,
Ат кеүек егеп һиңә сабам.

Мең-мең шиғыр яҙыр булам мин,
Барыһын да һиңә бағышлап.
Уйҙарымды, хыялдарҙы бүләм
Һинһеҙ улар, әсәкәйем, ел-туҙан.





## ЯНДАРЫҢДА ТЕЛҺЕҘ ҠАЛЫП...

Яндарыңда телһеҙ ҡалып,
Өндәшергә ҡыймай торам.
Һүнмәһенсе ал шәфәҡтәй,
Бер ҡабынған һөйөү-усаҡ.

Серле моңдай йәнкәйемде,
Йөрәгемде әсир иттең.
Илаһи ла был саҡырыу,
Йәнгә үтеп, әй, тилертте.

Зинһар, минең, әй, әүлиәм,
Яңғыҙымды яндырмасы.
Аҡыл, ҡаушау, һағыштарҙы,
Был йәнемдә ҡалдырмасы.

*(Ҡамса Мортазин тәржемәһе)*



## ЯНДАРЫҢДА ТЕЛҺЕҘ ҠАЛЫП...

Яндарыңда телһеҙ ҡалып,
Өндәшергә ҡыймай торам.
Һүнмәһенсе ал шәфәҡтәй,
Бер ҡабынған һөйөү-усаҡ.

Серле моңдай йәнкәйемде,
Йөрәгемде әсир иттең.
Илаһи ла был саҡырыу,
Йәнгә үтеп, әй, тилертте.

Зинһар, минең, әй, әүлиәм,
Яңғыҙымды яндырмасы.
Аҡыл, ҡаушау, һағыштарҙы,
Был йәнемдә ҡалдырмасы.

*(Ҡамса Мортазин тәржемәһе)*





# ГҮЗӘЛГӘ

Яратмай, тип үпкәләп йөрөмә
Бәхетте бит һорап алып булмай.
Матур исем һиңә Хоҙай биргән
Гүзәллеккә бер кем ҡарап туймай.

Сәскәләрҙәй күрәм һинең һыныңды,
Йәшә мәңге шулай саф булып.
Төшөрмә, тим, йөҙгә күләгәләр,
Ейәндәргә бағайыҡ шат булып.

Һәр йәндә лә тулып сәскә атмай.
Мөхәббәттең теле — иң бөйөк тел.
Тик ғашиҡтар һүҙен елгә атмай.
Йөрәк уты — усаҡ уты түгел.

Яратмай тип, үпкәләп йөрөмә
Мөхәббәтте һатып алып булмай.
Матур исем һиңә Хоҙай биргән,
Гүзәл заттан бармы берәү туйған?!



Гүзәл ханым, 2003 йыл



# ШИШМӘ КЕҮЕК СЫЛТЫР-СЫЛТЫР...

Шишмә кеүек сылтыр-сылтыр
Йөрәгемде даулап ҡалдыраһың.
Үҙең ярһыу, аҫыл, үҙең сабыр,
Күңелемде генә ҡандыраһың.

Тик һин генә минең уйҙарымда,
Ҡолағымда һаман сылтыр-сылтыр.
Әгәр һин булмаһаң яндарымда
Төндә мине кем оҙатыр?!

Зарланмайым әле, уфтанмайым,
Күңел ташҡан, йөрәк янған сҡта.
Һандуғастай булып һайрап ҡалам,
Сылтырап шишмәләр аҡҡан яҡта.





Сүзәнә ҡыҙымдың портреты, 1993-йыл



Бер, ике,өс, дүрт.
Биш, алты,
Ете, һигеҙ,
Ете, һигеҙ.
Йәйге көндәр
Сыуаҡ көндәр
Килегеҙ.

Ете, һигеҙ,
Ете, һигеҙ.
Килегеҙ,
Килегеҙ.
Майлы күмәс
Бирербеҙ.

Туғыҙ, ун,
Туғыҙ, ун.
Йәй килде
Беҙгә бөгөн.

Күлдәге
Матур
Унын
Әйберҙәре
Күп уның.
Туғыҙ, ун,

Туғыҙ,ун.
Көн һайын
Яңы кейем
Алмаштырып,
Кейә ул.

Бер, ике,
Ике, бер.
Иҫәпләйек
Икебеҙ.

Бер, ике,
Өс, дүрт.
Биш, алты,
Туғыҙ, ун
Көҙ кейһә лә,
Күлдәктәр,
Ҡыш ап-аҡ
Йылы тунын.

Һынашмаҡты
Иптәш итһәк,
Иҫәпләрбеҙ
Беҙ уны.





## ПАРСАЛАР

Иман нуры йөрәгемдә,
Хоҙай — күңелем түрендә.
Ышанмаһаң үҙ-үҙеңә,
Һүнер утың йортоңда.

***

Һуңлап килгән төшөнөүҙәр —
Ҡыш уянған айыуҙай.
Тәпәйенең тапмай тәмен
Табырмы икән ҡыш йәмен?

***

Берәү ерҙә әйләндерә
Юҡ-бар эшен эш итеп.
Берәү ерҙә өйләндерә
Кешене кеше итеп.

***

Күрмәгәнде һөйләү —
Үҙ күҙеңде бәйләү.

***

Һүҙ менән һүҙ араһы киң —
Ғаләм соҡорона тиң.

***

Балаңдан күргең килһә файҙа,
Сығыр, ишегең майла.

***

Кенә тотоу — үҙенә ҡәбер ҡаҙыу,
Донъяла унан да тәрән соҡор юҡ.

***

Иң тәүҙә кеше бул,
Аҙаҡтан донъя бүл.

***

Балдың тәме тыуа телдә —
Кеше эшләгән эшендә.

***

Йыр тыуҙырыу өсөн аҡыл кәрәк,
Ә аң үҫтереү өсөн — йөрәк.

***

Кешелек — ғәжәйеп бейек тау.
Бөтөн тауҙарҙан да бейек.





***
Хаҡикәткә тапҡың килһә юл,
Гел туп-тура ғына атла.
Тәүҙә юлсы күҙҙәреңде йом,
Ҡолағыңды нығыраҡ ҡапла.

***
Ҡояш — һүҙ түгел, ут,
Уйҙарыңды таҙа тот.

***
Елгә ташланған һүҙ — вәхшиләнә,
Бүреләй хужаһына әйләнә.

***
Ғүмер әйләнһә ҡурсаҡ уйынына —
Элэгерһең янартау[1] ҡуйынына.

---

1 вулкан







Тәгеш урмандары

ЙӨКМӘТКЕҺЕ

Минең тыуған яҡтарымда .......... 5
Әсәйем .......... 6
Аллаһ юлында йөрөһәм дә.......... 7
Ниңә яҙам?.......... 10
Әсәйемә .......... 11
Яндарыңда телһеҙ ҡалам.......... 12
Гүзәлгә .......... 14
Шишмә кеүек сылтыр-сылтыр.......... 16
Һынашмаҡ .......... 18
Парсалар .......... 22

Урал Ҡолошов
**Һүнмәһенсе һөйөү усағы...**

Әҙәби-нәфис баҫма
Мөхәррире — Ҡамса Мортазин
Рәссамы — Урал Ҡолошов
Корректор-йыйыусыһы — Нурия Иҡсанова

Силәбе – 2015

---

Урал Кулушев
**Огонь любви и откровений...**

Литературно-художественное издание

Редактор — Камса Муртазин
Художник — Урал Кулушев
Корректор, набор текста — Нурия Иксанова
Вёрстка, оформление — Вячеслав Беленький

В оформлении обложки использована
картина У. Кулушева «Миасс»
Подписано в печать 20.01.2016
Шрифт Times New Roman
Тираж 10 экз.

Творческая мастерская «Солнечный круг»
454007, г. Челябинск, ул. Артиллерийская, д. 104а,
тел. +7 (919) 111-58-50

Отпечатано в типографии «Абрис-принт»
454008, г. Челябинск, просп. Комсомольский, д. 2,
тел. +7 (351) 729-9-729

